*Сулпан* ***МИҢЛЕБАЕВА***

# Ысын тарих сағылышы

## (Мәүлит Ямалетдиндың «Ишмөхәмәт сәсән» роман-эссеһын уҡып сыҡҡандан һуң тыуған уйҙар)

### Рәхмәт һүҙем

*Мәүлит Ямалетдиновтың «Ишмөхәмәт сәсән» роман-эссеһын уҡый башлаъас, күңелемде һүҙҙәр менән генә аңлатып бирә алмаслыҡ яҡты һаъыш биләп алды. Сөнки әҫәрҙә һүрәтләнгән хәл-ваҡиъалар минең тыуып-үҫкән яҡтарым — Урал аръяъында, йәмле Ҡыҙыл буйҙарында бара. Күҙ алдыма ап-асыҡ булып бала саҡта өләсәйемә эйәреп емеш-еләккә йөрөгән тау биттәре, туъайлыҡтар килеп баҫты. Өләсәйем — мәрхүмә лә бит, ҡайҙа барһаҡ та, ер-һыу атамаларын, уларҙың тарихын һөйләй-һөйләй йөрөй торъайны. Хәтеремә һеңгәндәй булъайны ла бит барыһы ла, тик, үкенескә күрә, ҡайһылары онотола төшкән икән. Роман-эссеның авторы, күңелемә үтә лә яҡын булъан ер-һыуҙар тураһында бәйән итеп, хәтеремде яңыртты, мине бала саҡ иленә алып ҡайтты. Шуның өсөн дә уъа ҙур рәхмәтемде еткергем килә!*

*Атайым мәрхүм дә Әбйәлилдә, бигерәк тә Күбәләк ырыуына ингән ауылдар — Балапан, Байым, Йәнекәйҙә, минең тыуъан ауылым Түйышта йыш йырланыла торъан тарихи йыр — «Сандуғас»те йырлай ҙа йөрөй торъайны. Был йырҙың яҙылыу тарихын һөйләгәне лә бөгөнгөләй хәтеремдә. Автор бәйән иткән тарих та атайымдың һөйләгәндәренә һүҙмә-һүҙ тигәндәй тура килә.*

*«Борон беҙҙең яҡтарҙа — Урал аръяъында Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев кеүек иҫ китмәле һәләтле, данлыҡлы кешеләр йәшәгән. Исемдәре, эшләгән изге эштәре онотолоп бөтөп бара инде. Их, берәй яҙыусы ошо хаҡта яҙып ҡалдырһын ине!» — тип әйтә торъайны атайым. Аллаъа шөкөр, уның изге теләге ҡабул булды. «Данлыҡлы яҡташтарыбыҙ тураһында яҙыусы әҙип табылды!», — тип һөйөнөп бөтә алмайым. Ошо әҫәр саҡ ҡына алданыраҡ сыҡҡан булһа, атайым уларҙы һис шикһеҙ уҡыр һәм авторъа ихлас күңелдән рәхмәт һүҙҙәрен еткергән булыр ине. Әммә кешенең үлеме лә, тыуымы ла Аллаһы Тәъәлә иркендә шул — яҙмыштан уҙмыш юҡ. Данлыҡлы яҡташтарым хаҡында иҫ китмәле эстәлекле тарихи роман-эссе ижад иткән авторъа рәхмәт һүҙҙәрен еткереү бәхете минең өлөшкә төшкәндер, күрәһең.*

*Ҙур рәхмәт Һеҙгә, Мәүлитбай Байгилде улы! Баҡыйлыҡҡа күскән атайым, ауылдаштарым, яҡташтарым, барлыҡ Күбәләк ырыуы кешеләре исеменән рәхмәт!*

*Фани донъя менән Бәҡыйлыҡ араһында күҙгә күренмәгән ептәр бик нескә бит ул. Бәҡыйлыҡҡа күскәндәр барыһын да күрә, белә, тиҙәр.*

*Хөрмәтле автор!*

*Үҙҙәре тураһында шундай әҫәр яҙылыуына әле һеҙ романығыҙҙа ғибрәтле яҙмыштарын бәйән иткән Ишмөхәмәт, Буранбай-Йәркәй, Байыҡ сәсәндәрҙең, Балапан апа, Зөбәйҙә инәйҙәрҙең, Мырҙаҡайҙың, сибәр ҡыҙ Ынйыҡайҙың һәм башҡа бик күп, мин исемдәрен атамаған геройҙарыңдың рухтары ла шатланалыр. Ошо әҫәрҙе яҙып, һеҙ үҙегеҙгә лә мәңгелек рухи һәйкәл ҡойҙоғоҙ. Быңдай әҫәрҙәр үлемһеҙ була! Сөнки уларҙа ысын тарих сағыла, ҡасандыр йәшәп киткән реаль шәхестәрҙең яҙмышы һүрәтләнә.*

*Был тарихи әҫәрегеҙ — киләсәк быуындарға аманат та, баһалап бөткөһөҙ ҡомартҡы ла.*

Башҡортостанда ғына түгел, сит ерҙәрҙә лә киң билдәле шәхес, талантлы яҙыусы Мәүлит Ямалетдиндың «Ишмөхәмәт сәсән» исемле роман-эссеһын (беренсе китабы «Ватандаш» журналының 2013 йылғы 10—12-се һандарында донъя күрҙе) уҡып сыҡҡандан һуң ҡулыма ҡәләм алмайынса түҙмәнем. Был әҫәрҙең Башҡортостан Яҙыусылар союзы тарафынан булдырылған Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге премияға тәҡдим ителгәнен ишеткәс, ҡайһы бер фекерҙәремде яҙып китергә булдым.

Бар булмышы менән ғәзиз тупрағына береккән илһөйәр әҙиптең был романында ла, алдараҡ яҙылған әҫәрҙәрендәге һымаҡ уҡ, ватансыллыҡ мотивтары бик көслө. Әҙип геройҙарының тыуып-үҫкән ерҙәренә тоғролоғон, йыр-моң һөйөүен, сал тарихҡа булған мөнәсәбәтен халыҡтың яҙмышы, теле, мәҙәниәте менән тығыҙ бәйләй. Талантлы һәм һүҙгә талапсан яҙыусы әҫәрендә ижтимағи, социаль, рухи-әхлаҡи проблемаларҙы күтәреп сыҡҡан. Геройҙарының күркәм рухи донъяһын, күңел хазинаһын оҫта итеп күрһәтеүгә өлгәшкән. Әҫәрҙә һүрәтләнгән образдарҙың барыһы ла тиерлек ихлас күңелле, рухи яҡтан бөйөк (Ишмөхәмәт, Байыҡ сәсән, Буранбай-Йәркәй сәсән, Мырҙаҡай, Балапан ҡарт, Зөбәйҙә инәй, Ынйыҡай, Дәминдәр һ.б.). Улар уҡыусы күңелендә һаҡланып ҡалырлыҡ сағыу буяуҙарҙа һүрәтләнгән. Мәҫәлән: «Балапан үҙе ейәндәренең ил-йортҡа таяныс, ырыуға йыуаныс булыуҙарын теләй. Ана бит, алтын ашыҡ һымаҡ, береһенән-береһе һөймәлекле булып тиң үҫеп киләләр, собханалла! Яурындарына уҡ-һаҙаҡ аҫып, билдәренә хәнйәр тағып, ҡалай ирәбеләнеп килгән булалар. Торғаны атлы яугирҙар!» «Шул саҡта Ҡарағужаның ғәйәт ҡыҙыу ҡанлы, тирә-йүнгә ҡыҙмалыҡлы тип даны сыҡҡан уҙаманы Дәминдәр телгә килде. Ҡырҡ йәштәр самаһындағы был кешенең үҙен-үҙе ярһытып, хәбәрҙе шарылдап һөйләй торған холҡо бар ине». «Уның һыҙылып киткән ҡыйғас ҡаштары бешкән муйыл төҫлө сөм ҡара күҙҙәрен тағы ла матурыраҡ итеп күрһәтә. Берҙән үрелгән, беләк йыуанлыҡ толомо осондағы сулпылары ҡыҙҙың һәр бер хәрәкәтенән сыңлап ҡуя. Балитәкле күлдәге лә, уның өҫтөнән кейгән йәшел камзулы ла Ынйыҡайҙың зифа буйына килешеп тора».

Автор әҫәрендә йыр һәм легендаларҙы, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе, фразеологизмдарҙы, төртмәле һүҙҙәрҙе — халыҡ ижады өлгөләрен уңышлы файҙаланған. Мәҫәлән: «Ауыҙыңа бал да май», «Ауыҙ — ҡапҡа, һүҙ — ел», «Бейҙән бейек булып булмай». Был иһә роман-эссеның милли колоритын арттырған, идея-эстетик йөкмәткеһен байытҡан. Яҙыусы үҙе һүрәтләгән геройҙарын эскерһеҙ теләктәшлек менән яратып һүрәтләгән. Уларҙы бары тик ыңғайға йәиһә кирегә ҡырҡа бүлмәгән,

нисек бар — шулай кәүҙәләндергән, яҙмыштарын Тыуған ер, Ватан төшөнсәләре менән тығыҙ бәйләгән.

Роман-эссены уҡыусы иғтибар иткәндер: әҫәр хис-тойғоға бай телдә, халыҡсан стилдә яҙылған. Ул үҙенсәлекле образ-персонаждарға бай. Был образ-персонаждар Ҡыҙыл һөйләшенә генә хас көньяҡ диалектында һөйләшәләр. Мәҫәлән: Балапан апа (бабай, йәки үҙеңдең атай һәм әсәйеңдән олораҡ йәштәге ир кешегә әйтәләр), атый (өндәш һүҙ). Пейзаж күренештәренең сағыу буяуҙарға мансылған булыуы, әҫәр геройҙарының телмәр үҙенсәлектәре яҙыусының художество оҫталығы хаҡында һөйләй: «Ә анау, түңкәрелгән ҡаҙан һымаҡ ҡалҡып, болоттарҙы терәтеп торғаны — Ямантау, төньяҡтағы бейек тау — Һыу башы Ирәмәл...» «Улар былай ҙа иҫ китмәле тәбиғәткә һоҡланып, ҡыраҙдарҙан асылған армыт-армыт тау теҙмәләрен, улар араһынан бормаланып аҡҡан йылғаларҙы, күҙҙәй мөлдөрәшеп ятҡан күлдәрҙе, ара-тирә күренеп ҡалған ауылдарҙы күҙәтеүҙән әҫәрләнеп киләләр ине». Тарихи үткән тормошто күҙ алдына килтерергә ярҙам иткән этнографик күренештәр: аш-һыу етештереү, ҡунаҡ һыйлау, кейем-һалым, йорт йыһаздары шул осор рухын асыҡ сағылдыра. Мәҫәлән: «Ләкин тап шул ваҡытта хеҙмәтсе ҡатын уртаса ҙурлыҡтағы һабаға мөлдөрәмә итеп ҡойолған ҡымыҙ индерҙе, тирмә түрендәге ағас һандыҡ өҫтөндәге туҫтаҡтар менән ижауҙы Ишмөхәмәт менән ҡунаҡтар алдына ҡуйып сыҡты. «Әйҙә, яҡыныраҡ ултырығыҙ», — тине хужа, ҡымыҙҙы семәрле ижау менән һапыра-һапыра».

Илһөйәрлек рухы менән һуғарылған, уҡыусылар йотлоғоп уҡырҙай был тарихи роман-эссе яҙыусының үткер ҡәләм эйәһе икәнлеген тағы ла бер ҡат иҫбатлай түгелме?!

### Әҫәрҙә сағылдырылған осор

Әҫәр Автор менән Тәнҡитсенең диалогынан башланып китә. Был — башҡорт әҙәбиәтендә яңы алымдыр, ахырыһы. Ошоғаса бер генә әҫәрҙә лә Автор менән Тәнҡитсенең әңгәмәләшкәнен осратҡаным юҡ ине әле. Минеңсә, был — бик уңышлы алым. Әңгәмәнән беҙ әҫәрҙә һүрәтләнәсәк осор, унда сағыласаҡ ваҡиғалар, төп герой — башҡорт халҡының рухи донъяһында айырым урын биләп торған Ишмөхәмәт сәсән тураһында мәғлүмәт алабыҙ. Инеш һүҙҙә автор үҙе яҙғанса: «Мин тасуирларға батырсылыҡ иткән герой хаҡында мәғлүмәттәр урыҡ-һурыҡ ҡына һаҡланған. Улары ла яҙма сығанаҡ түгел, ә телдән-телгә, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа күсеп, беҙҙең көндәргә килеп еткән һәм хәҙер инде риүәйәткә әүерелгән айырым хәтирәләр. Ишмөхәмәт сәсән тураһында әҙәби әҫәр тыуҙырырға тырышыуҙың төп ауырлығы шуға ҡайтып ҡала». Шуныһы һөйөнөслө — мәғлүмәттәрҙең аҙ булыуына ҡарамаҫтан, яҙыусы ундағы ваҡиғаларҙа үҙе лә ҡатнашып йөрөгән, үҙе лә күп нәмәләргә шаһит булған кеүек, барыһын да ышандырырлыҡ итеп һүрәтләгән. Романды уҡыусы ла, үҙе лә һиҙмәҫтән, әҫәрҙә барған ваҡиғаларҙың эсенә барып инә. Әҫәр геройҙары менән бергә шатлана ла, ҡайғыра ла. Улар йөрөгән һуҡмаҡтарҙан, юлдарҙан йөрөй, улар тәғәм иткән ризыҡтарҙан ауыҙ итә, әҫәрләнеп китеп ҡурай тауыштарын, моңло йырҙарын тыңлай. Һүҙ ҙә юҡ — яҙыусы ышандыра белә. Әллә ниндәй күҙгә күренмәгән тылсым көсөнә эйә булған Әүлиәләй, уҡыусыны үҙе һүрәтләгән осорға — XVIII быуат башына алып китә. Ә XVIII быуатты боронғораҡ башҡорт тарихындағы иң фажиғәле осор тип атап булалыр.

1735 йылдан 1775 йылға тиклемге 40 йыл эсендә генә башҡорттар эре-эре дүрт ихтилалға күтәрелә. Автор үҙе яҙғанса: «Ә һәр бер яу артында ҡойолған ҡан, өҙөлгән ғүмерҙәр, сарыф ителгән мал, яндырылған ауылдар, ҡоллоҡҡа ҡыуылған бала-саға

менән ҡатын-ҡыҙҙар тарафынан түгелгән күҙ йәштәре даръяһы ята. Бер һүҙ менән әйткәндә, икһеҙ-сикһеҙ матди һәм генетик юғалтыуҙар. Донъяла бер генә кеше лә, бер халыҡ та ерле юҡҡа баш күтәрмәй — уларҙы ҡоралға тотонорға мәжбүр итеүсе етди сәбәптәр була. Башҡорт ихтилалдары тарихсылар тарафынан ентекле тикшерелгән, сәбәптәре асыҡланған. Уларҙы ҡыҫҡаса ғына итеп әйткәндә — Алла тарафынан һәр кемгә тигеҙ бирелгән иректе һәм йәшәүгә булған хоҡуҡтарҙы сикләү. Ә былар, билдәле булыуынса, һәр төрлө йәбер-золомдоң башы.

Үрҙә атап кителгән осорҙағы Аҡай-Ҡилмәк, Ҡараһаҡал, Батырша, Бүгәс-Салауат етәкселегендәге ихтилалдарҙың нигеҙендә тап шул сәбәптәр ята ла инде.

XVIII быуат Рәсәй тарихында, Көнбайыш илдәренән күрмәксе, сәнәғәткә ынтылыу осоро булараҡ та айырылып тора. Сәнәғәтте үҫтереү өсөн, билдәле, сеймал кәрәк. Ҡаҙылма байлыҡ ҡайҙа тиһәгеҙ, ул — Уралда. Эшсе көсмө? Ана, Рәсәйҙә крепостной крәҫтиәндәр менән быуа быуырлыҡ — һатып ал да, арзан эш көсө итеп ҡуллан. Башҡорт ерҙәренә күбеһе алдау юлы менән килеп ултырған боронғо тау заводтары башлыса ана шул XVIII быуатта төҙөлә. Яҙыусы үҙенең әҫәрендә ана ниндәй ҡатмарлы осор хаҡында бәйән итә.

## Әҫәрҙең төп геройы хаҡында

Түбәндәге юлдар романдың төп геройы Ишмөхәмәт сәсәндең ниндәйерәк кеше булыуын бер ни тиклем асып һалғандай: «Ҡыш уртаһындағы сатнама һыуыҡ көндәрҙең береһендә күрше Туйыш ауылында йәшәгән Ҡалдыман байҙан Ишмөхәмәткә саҡырыусы килеп төштө. Даны алыҫтарға таралған арҙаҡлы заттың йомошсоһо атын һәр кемдең ҡапҡаһына бормай — ундай хөрмәт бик һирәктәр өлөшөнә төшә торған көмөш. Ҡалдыман байҙың бөгөнгө саҡырыуы шул һирәктәр рәтенә инеүенә бер ишара ине. Уйлай китһәң, был ишараның ерлеге лә юҡ түгел шул: саҡырылыусы кеүек егеттәр ерҙә аунап ятмай — үҙе — ҡурайсы-сәсән, үҙе йыраусы, үҙе көйсө. Хеҙмәтенә лә тел тейҙерерлек түгел — Ишмөхәмәт казак, приказный дәрәжәләрен үтеп, кесе урядник чинына үрләтелгән ғәскәри кеше. Өҫтәүенә, үҙе — аҫыл заттан, өйәҙ менән кантонда ғына түгел, губернала билдәле булған Балапан нәҫеленән».

Әбйәлилдә Туйыш ауылының арҙаҡлы байы Ҡалдыман ҡарттың баҡый донъяларға күсер алдынан Ишмөхәмәт сәсәнгә ҙур үтенес менән мөрәжәғәт иткәнен бик яҡшы беләләр. Автор ҙа ике билдәле шәхестең әңгәмәләшеүен диалог формаһында биргән:

— Бер үтенесем бар һиңә: беҙҙең ауылдың төштәнәһе булған Саңдау үҙәккә бағышлап, минең исемдән йыр сығара алмаҫһыңмы? Боронғолар: «Ир үлер ҙә дан ҡалыр», — тигән. Исмаһам, минән дә бер дан ҡалыр ине...

— Вәғәҙә итә алмайым, шулай ҙа самалап ҡарарға була.

Оҙаҡ ҡына уйланып йөрөгәндән һуң, Ишмөхәмәт сәсәндең күңелендә әллә күпме йылдар, быуаттар үтһә лә онотолмаҫлыҡ, үлемһеҙ йырҙың һүҙҙәре һәм көйө тыуа:

Саңдүҙәккәй, һинең йәмең булды,
Малым менән күсеп мин килгәс.
Саңдүҙәккәй, һиңә йыр сығарҙым,
Дәртле ирҙәр йырлар, мин үлгәс.

Автор йыр-моңдоң барса ҡиммәттәрҙән дә ҡиммәтерәк икәнлеген Ҡалдыман байҙың һүҙҙәре аша әйттерә: «Бына минең йәйгеһен йәйләүгә, ҡышҡыһын ҡышлауға һыймай ялан тултырып йөрөгән мал-тыуарымды уйлап ҡарағыҙ: уларҙы

аҙаҡтан кем иҫкә алыр икән? Ә бына Ишмөхәмәт сәсән сығарған «Саңдуҙәк» йыры килер быуындарҙың йөрәгендә йәшәр. Шул хатта күҙгә күренмәгән, тик ҡолаҡҡа ғына ишетелгән йыр минең һанһыҙ малыма ҡарағанда ҡиммәтлерәк икәненә төшөндөм...»

Ишмөхәмәт, малай ғына сағында, барлыҡ тирә-яҡта билдәле шәхес, бик ҙур абруйға эйә булған оло талант эйәһе Байыҡ сәсәндән башҡа бер кем дә бирә алмаған фәһемле дәрестәр ала. Данлыҡлы «Урал батыр» эпосын ҡыш буйына өйрәнеп, ғүмерҙә лә онотолмаҫлыҡ итеп ятлап алып, хәтер һандығына һалып ҡуя. Байыҡ сәсән уның өсөн бөйөк остаз да, үҙенән күп йәшкә оло булыуына ҡарамаҫтан, фекерҙәш тә, дуҫ та була.

Ишмөхәмәттең тормошонда Байыҡ сәсән һымаҡ уҡ ҙур роль уйнаған тағы ла бик сағыу шәхес, барлыҡ башҡорт халҡына билдәле яугир-сәсән Буранбай-Йәркәй була. Йәнә лә романға мөрәжәғәт итәйек: «Буранбай-Йәркәй етәкселегендәге биш йөҙ яугир, ауыл һайын туҡтап, сафтарын тулыландыра-тулыландыра, дүртенсе кантон биләмәләренә килеп етте. Был ярһыу йөрәкле сәсәндең, Әй-Йүрүҙән буйҙарындағы ваҡиғаларҙы ишетеп, уларға әҙ булһа ла ярҙамға тип йыйған ғәскәре ине».

Автор Ишмөхәмәт сәсәндең ысыҡтай саф мөхәббәте хаҡында ла йылы хис менән бәйән итә. Гүзәлдәрҙән-гүзәл ҡыҙ Ынйыҡай менән юлдары яҙмыш ҡушыуы буйынса мәңгелеккә айырылһа ла, ул уны ғүмерҙә лә онота алмай. Һөйгәненә арнап моң-һағышҡа тулы йырҙар сығара. Ишмөхәмәт менән Ынйыҡайҙың Саҡ менән Суҡ яҙмышына дусар ителгән йәндәре ғүмер буйы бер-береһен һағынып йәшәй.

Әҫәрҙәге барлыҡ образдар ҙа Ишмөхәмәт сәсән тирәләй тупланған: уның яҙмышында ифрат ҙур роль уйнаған Балапан олатаһы, атаһы Ғәбди, әсәһе Мөьминә, өләсәһе, Мәһәҙи, Бикәт, Ҡаһарман, Баязит, Яуымбай, ҡустыһы Баймөхәмәт, Байым тархан, Ғаҙуан, Малбай кеүек дуҫтары һәм мин исемдәрен атамаған бик күп персонаждар. Ишмөхәмәт сәсәнде автор бер ниндәй ҙә етешһеҙлеге булмаған, кеселекле, кешелекле шәхес итеп күрһәтә. Ил-йорт өсөн, туғандары өсөн ул йәнен бирергә лә әҙер. Сәсәндә милләтебеҙҙең барлыҡ яҡшы сифаттары тупланған. Мин авторға бер ниндәй шикләнеүһеҙ ышанам. Был әҫәрҙе яҙып, Мәүлит Ямалетдин үҙенә лә мәңгелек рухи һәйкәл ҡуйҙо. Бындай әҫәрҙәр оҙаҡ йәшәй. Сөнки уларҙа ысын тарих сағыла, ҡасандыр йәшәп киткән реаль шәхестәрҙең яҙмышы ҙур оҫталыҡ менән һүрәтләнә.

Ғүмере буйына ал-ял белмәйенсә халҡы, иле өсөн күп көс түккән, әле булһа иң алғы сафта барыусы яҙыусыларҙы атарға ҡушһалар, мин тәү сиратта Мәүлит Ямалетдинды атар инем. Күңеленә сикһеҙ Йыһандан урғылып килгән, иң юғары сифатҡа эйә булған, зауыҡлы, һүҙ менән әйтеп аңлатҡыһыҙ, сыңрау торна моңондай аһәңгә эйә, һағыш тулы шиғырҙары менән кеше күңелдәрен имләүсе табип та ул, алтын аҡыллы аҡын да, иҫ китмәле моңло йырсы ла, ҡурайсы ла ул. Юғары рухлы, кешелекле, кеселекле һәм шул уҡ ваҡытта бөйөк шәхес тә, Ҡөрьән Кәрим сүрәләрен шиғри ҡалыпҡа һалған юғары рухлы тәржемәсе лә ул.

Мәүлит Ямалетдиндың бөгөнгө көндә төрлө жанрҙағы егерменән ашыу китаптары донъя күргән. Анау хәтле әҫәрҙәрҙе яҙыу өсөн күпме рухи көс һәм илһам кәрәк! Ә ижад менән шөғөлләнеү, яҙыусылыҡ эше бигүк еңелдән булмаған хеҙмәт. Анау ҡәҙәре хеҙмәт баһаһыҙ ҡалырға тейеш түгелдер, тип уйлайым. Шәхестәребеҙ иҫән ваҡытта ҡәҙерҙәрен беләйек!